БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ

ӨФӨ ҠАЛАҺЫ ҠАЛА ОКРУГЫ ХАКИМИӘТЕ

МӘҒАРИФ ИДАРАЛЫҒЫ

БОРОН-БОРОН ЗАМАНДА...

«Һаумы, һаумы, әкиәт!»

донъя халыҡтары әкиәттәре башҡортса

ӨФӨ - 2021

БОРОН-БОРОН ЗАМАНДА…: «Һаумы, һаумы, әкиәт!» донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүселәрҙең ҡала конкурсы. - Өфө: Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы, 2021 - 56 б.

Редакцион коллегия:
Хаффазова Е.Р., Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығы начальнигы;
Арыҫланов В.З., Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығы начальнигы урынбаҫары;
Шеина О.В., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы директоры;
Йосопова А.Ғ., Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығының баш белгесе;
Рәхмәтуллина С.Х., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһының бүлек мөдире;
Шәрәфетдинова З.Т., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы методисы.

«Борон-борон заманда....» исемле йыйынтыҡ үҙ эсенә «Һаумы, һаумы, әкиәт!» донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүселәрҙең ҡала конкурсының «Йәш әкиәтсе» номинацияһында ҡатнашҡан балаларҙың ижад эштәрен туплаған.

Был йыйынтыҡ кескәй балаларға, ата-әсәләргә, тәрбиәселәргә һәм уҡытыусыларға тәҡдим ителә.

Әбүбәкерова Шәүрә,

Өфө калаһы кала округы

109-сы балалар баксаһы

муниципаль бюджет мәктәпкәсә

белем биреү учреждениеһы

тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Фёдорова Айгөл

Илфат кыҙы

Яҙ сәскәләре

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, Яҙһылыу менән Ҡарһылыу. Улар икеһе лә бик матур һәм уңған ҡыҙҙар булғандар. Бигерәк тә һүрәт төшөрөргә яратҡан улар. Иртән иртүк торалар ҙа, буям-ҡәләмдәрен алып, тәбиғәткә сығалар, ти.

Ҡарһылыу аҡ һәм күкһел төҫтәрҙе яратҡан. Ауылдағы кешеләр тороуға тирә-яҡты йәмләп аҡ нурҙарын өләшкән. Балалар тәҙрәләге биҙәктәргә ҡарап һоҡланған, Ҡарһылыу яһаған һүрәттәр бигерәк ныҡ оҡшаған уларға. Тик, Яҙһылыу күренеү менән, Ҡарһылыуҙың әҙерәк күңеле төшкән. Ҡояш апайына серҙәрен һөйләп, илап та ала торған булған. Ҡояш апайы уны яратҡан һайын, Ҡарһылыуҙың күңеле йомшарған, ти.

Яҙһылыу бигерәк алсаҡ булған. Уның йылыһы барыһына ла еткән. Ҡарһылыуға ҡарағанда, Яҙһылыу сағыу төҫтәрҙе яратҡан. Ул урамда күренеү менән ҡоштар һайрашҡан, тәбиғәт йоҡоһонан

Бер ваҡыт Ҡарһылыу менән Яҙһылыу тау башында осрашҡан, ти. Кем тиҙерәк тауҙан йүгереп төшөр тип ярыш үткәрергә булғандар. Етәкләшеп алғандар ҙа йүгерәләр ҙә йүгерәләр, ти. Яҙһылыу беренсе булып уҙып китәм тигәндә, Ҡарһылыуҙың боҙло итәгенә баҫып ҡолап китә. Дәфтәрендәге төрлө төҫтәге сәскәләр яҙ биҙәктәре булып тау битләүенә һибелә! Шулай итеп, урмандарҙа тәүге сәскәләр – умырзаялар үҫә башлай. Ә Ҡарһылыу оялышынан илап ебәрә. Уның йәштәре ҡыйыҡтарҙан тамған, гөрләүек булып аҡҡан, ти.

Ғәлин Булат,

Өфө калаһы кала округы

308-се башҡорт балалар баҡсаһы

муниципаль автоном мәктәпкәсә

белем биреү учреждениеһы

тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Хөснөтдинова Эльзида

Рафаэл кыҙы

Айыуҙың ҡойроғо ниңә ҡыҫҡа?

Борон-борон заманда ҡуян менән айыу бигерәк тә дуҫ булғандар, ти. Айыу шул тиклем маҡтансыҡ булған. Ул, үҙенең оҙон ҡойроғона ғорурланып, ҡуяндың ҡыҫҡа ҡойроғонан көлмәк булған. Ҡуяндың шул тиклем асыуы килеп киткән. «Был маҡтансыҡтың нисек иманын уҡытырға?» - тип уйлай башлаған. Уйлап тапҡан шулай ҙа. Хәйлә менән алдырырға булған. Бер көн ҡуян, ағас ҡыуышы эсенә инеп ултырған да, айыуҙың үтеп барғанын күргәс, тауышын ҡалынайтып: «Шул айыуҙың күҙе бигерәк тә тәмле инде!» - тип ҡысҡырған. Быны ишеткән айыуҙың ҡото осҡан! Әкрен-әкрен артҡа атлап барғанда, уға төлкө осраған. «Ана теге ҡыуышта ҡот осҡос йәнлек ултыра, әйҙә күрһәтәм»,- тигән, ти, ул уға. «Мин ҡурҡам!» – тигән төлкө. «Ҡурҡма, әйҙә, ҡойроҡтарҙы бәйләйек. Бәлә-ҡаза килһә, бер-беребеҙҙе ташламаҫбыҙ», - тигән айыу. Шулай иткәндәр.

Был икәүҙе күреп, ҡуян ҡаушап ҡалмаған. «Ҡарағыҙ әле, бына ул айыуға! Миңә һимеҙ төлкө алып килергә вәғәҙә биргән ине, ә был үлеп бөткән төлкө алып килгән!» - тигән, ти. Төлкө, мине айыу ҡорбан итмәксе булған икән, тип уйлап, йәһәт кенә һыпыртыу яғын ҡараған. Әммә айыуҙың ҡойроғон өҙөп сығарып ҡасҡан. Шул ваҡыттан бирле айыуҙар өтөк ҡойроҡло килеш йөрөй, имеш.

Ғилманов Камил,

Өфө калаhы кала округы 106-сы балалар баҡсаhы муниципаль бюджет мәктәпкәсә белем биреү учреждениеhы тәрбиәләнеүсеhе

Етәксеhе: Моратова Эльвира Хисаметдин ҡыҙы

Ҡояштың йөҙө ниңә ҡыҙарған?

Нәркәс исемле бер ҡыҙ йәшәгән, ти. Бик көйhөҙ булған ул. Кейенмәйем, сисенмәйем, мунсаға бармайым, hабынлап йыуынмайым, күҙҙе әсеттерә hәм башҡа сәбәптәр табып, тауыш сығарған. Нәркәс исемле ҡыҙҙар үпкәләп ҡуймаhын. Был элекке хәл булған.

- Уйнарға урамға бер үҙем сыҡмайым! - тип мыжый был, әсәhенең ваҡыты бик аҙ булhа ла.

- Бар, ҡыҙым, үҙең генә уйнап кил. Тәҙрәгә ҡара әле, күрше ҡыҙҙары үҙҙәре генә уйнай, - тигән әсәhе.

Ашыҡ-бошоҡ кейенә башлаған Нәркәс. Күлдәгенең артын алға кейгән дә, сисә алмай уралып ҡолағас, илап ебәргән. Туфлиҙарының башы икеhе ике яҡҡа ҡарап тора, ти. Шунан уны әсәhе үҙе кейендергән дә:

- Бысранмай ғына уйна, - тип оҙатып ҡалған.

Күп тә үтмәй, Нәркәстең аҡырып илаған тауышы ишетелгән. Бөтә донъя һелкендеме ни... Әсәһе йүгереп сыҡһа, шундай хәл күрә: Нәркәстең күҙҙәре генә күренә икән. Ә иптәштәре бысраҡ ҡыҙ менән уйнарға теләмәй икән.

- Эй ҡыҙым, ҡыҙым, миңә кешеләрҙән оят. Ана, һинән ҡасып күбәләктәр осоп китте, себештәр үлән араһына йәшеренде, ә ҡаҙ бәпкәләре йылғаға төшөп китте. Хатта ҡояштың йөҙөн дә ҡыҙарттың, - тигән әсәһе, аптырағас.

Ғосманова Мәҙинә,

Өфө ҡалаһы ҡала округы

308-се башҡорт балалар баҡсаһы

муниципаль автоном мәктәпкәсә

белем биреү учреждениеһы

тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Хөснөтдинова Эльзида

Аҡыллы тейен

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер бүре. Бер көндө ул һунарға сығып киткән. Ул бер ағастың ботағында ултырған тейенде күреп ҡалған, ти.

Бүре тейенгә ҡарап торған да:

– Дуҫ, бында төш әле. Ерҙә һәйбәтерәк бит, - тигән. Тейен бүренең хәйләһен тиҙ аңлап алған һәм былай тип яуап биргән:

– Юҡ, дуҫ бейектә һәйбәтерәк. Мин бынан бөтәһен дә күреп торам.

– Хәҙер һин нимә күрәһең? - тип һораған бүре тейендән.

– Был яҡҡа, мылтыҡтарын тотоп, һунарсылар килә. Ошо һүҙҙе ишетеүе була, бүренең табаны ғына ялтырап ҡалған, ти.

«Аҡыллының аҡылы – йөрәгендә, тиленеке – телендә», тип юҡҡа ғына халыҡ әйтмәй шул.

Изгин Рамаҙан,

Өфө ҡалаһы ҡала округы

308-се башҡорт балалар баҡсаһы

муниципаль автоном мәктәпкәсә

белем биреү учреждениеһы

тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Хөснөтдинова Эльзида

Пыһ-пыһ

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Булған, ти, уларҙың Йәмилә исемле ҡыҙҙары. Бабай менән әбей ҙур баҡса ҡарағандар. Баҡсала улар кәбеҫтә, кишер, сөгөлдөр һәм дә шалҡан үҫтергәндәр.

Бер ваҡыт бабайҙың шалҡан ашағыһы килеп киткән. Баҡсаға сығып шалҡанды йолҡайым тип эйелһә: «Пы-ыһһ! Пы-ыһһ!» - тигән тауыш ишетеп ҡала. Бабай ҡурҡып өйөнә йүгергән дә әбейгә: «Ай-һай, әбейкәйем! Шалҡан төбөндә ҡурҡыныс нимә «пыһ» итеп ултыра. Көскә аяғымды алып һыпырттым», - тигән.

- Етәр һиңә, бабай! Ҡайҙа үҙем сығып ҡарайым әле шалҡанды!

Әбей ҙә шалҡан төбөнә барып эйелһә, кемдер тағын: «Ппыһ-ыһ! Ппыһ-ыһ!» - тигән. Көскә-көскә әбей ҙә аяҡтарын алып

Йәмилә әбей менән бабайға ҡарап торған да әйтә икән:

- Хәҙер үҙем шалҡанды алып инәм!

Шалҡанды тартам тигәндә: «Ппы-ыһ! Ппы-ыһ!» тигән, тауыш ишетеп ҡала.

Йәмилә ҡурҡмаған, нығыраҡ эйелеп ҡараһа, түтәлдә, күҙҙәрен ялтыратып, энәле терпе ята икән.

Йәмилә шалҡанды тартып сығарған.

Әбей менән бабай аптырап, Йәмиләнән: «Ҡайҙа шалҡан? Теге йәнлектән ҡурҡманыңмы, ҡыҙым?», - тип һорайҙар.

Йәмилә эсен тотоп көлөп:

- Был бит бәләкәс кенә терпе булған!

Искужин Рушан,

Өфө ҡалаһы ҡала округы 308-се башҡорт балалар баҡсаһы муниципаль автоном мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Искужина Нәзифә

Маҡтансыҡ турғай

Йәшәгән, ти, бер турғай. Бер көндө ул миләш ағасына ҡунып, тәмле емештәрен ашай икән, ә аҫта ҡупшы ғына, һары ғына бесәй ҡояшта ҡыҙына, ти. Бесәй ятҡан ерҙә миләштәр эре, һутлы ғына. Турғай ипләп кенә, бесәйҙе уятмаҫҡа тырышып, шул яҡҡа яҡынлаша башлаған, ә бесәй ҡыбырламай ҙа. Турғай тағы ла яҡыныраҡ килә, ә бесәй һаман ҡыбырламай ятыуын белә. Турғай ағас ботаҡтарын һелкетеп ҡарай, хатта бар ҡыйыулығын йыйып ҡанаттары менән бесәйгә тейеп ала, ә бесәй һаман тик ятыуын белә. Турғай ҡарап-ҡарап торған да, бесәйҙең башына осоп ҡунып, суҡып-суҡып, ҡанаттары менән ҡаҡҡылап-һуҡҡылап, осоп киткән һәм үҙенең иптәштәренә әйтә икән:

- Мин бер нәмәнән дә, бер кемдән дә ҡурҡмайым, хатта бесәйҙән

Турғайҙар ышанмай былай тигәндәр:

- Беҙ һиңә ышанмайбыҙ!

- Ышанмаһағыҙ, әйҙәгеҙ, осоғоҙ минең арттан, - тип әйтә.

Турғайҙар миләш ағасына килеп етеп, өҫтән ҡарап торалар икән, ә был маҡтансыҡ турғай, туп-тура теге ятҡан бесәй яғына осоп килеп, бер булып бесәйҙе суҡый башлаған.

Өҫтәге турғайҙар көлә башлағас, яҡшылап ҡараһа, был бесәй тигәне ҡупшы ғына, һары ғына бүрек булып сыҡҡан.

Кәбирова Диана,

Өфө калаһы кала округы

18-се башкорт балалар баксаһы

муниципаль автоном мәктәпкәсә

белем биреү учреждениеһы

тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Ишдәүләтова Әлиә

Әйҙә, дуҫлашайык

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, Ләлә исемле күбәләк. Ул дуҫтары менән бергәләп сәскәләр янында уйнарға яратҡан. Ярышып осҡанда, Ләләне берәү ҙә тота алмаған.

Бер көн, бына шулай уйнап йөрөгәндә, кеше тауышы ишетелгән. Наҙлы ғына тауышлы ҡыҙ күбәләктәр янына йүгерә-йүгерә атлай икән. Үҙе шатлана, көлә. Ләлә сәскәгә ҡунған да, аптырап уға ҡарап торғансы, ҡыҙыҡай Ләләне эләктереп тә алған! Күбәләк, аптырап, бер ни ҙә әйтә лә алмаған, тик үкереп илап ебәргән. Дуҫтары шул арала тирә-яҡҡа осоп та киткән. Ҡыҙ бала Ләләнең матурлығына аптыраған: күк кенә сағыу күлдәк, борсаҡтай һибелгән аҡ мәрйендәр бигерәк тә матур шул! Нығ бармаҡтары менән Ләләне улай ҙа, былай ҙа өйрөлтөп ҡараған. Бер аҙ торғас, ҡыҙыҡай шатлана-шатлана күбәләкте усына йомоп йүгереп киткән.

Ләләнең матур күлдәге сырышҡан, ҡанаттары ауыртҡан, тик уның илауын ҡыҙыҡай ишетмәй шул.

- Әсәй! Әсәй! Бына ниндәй матур күбәләк тотоп алдым! – тип ҡыҙыҡай әсәһенә үҙенең табышын күрһәткән. Йомоп тотҡан усын асҡан икән, Ләлә бөтә көсөн йыйып осҡан да киткән!

Ҡапыл матур күбәләген юғалтҡас, ҡыҙыҡай ҡысҡырып илап ебәргән. Әсәһе тынысландыра, ти:

- Күбәләктәр беҙҙең кеүек тере йән эйәләре, уларҙы тоторға, кәмһетергә ярамай, ҡыҙым. Ярай ҡанаттарын һындырмағанһың, осоп китеүе бик һәйбәт булды.

Ләлә алыҫҡа осоп китһә лә, кешеләрҙең һөйләшеүен ишеткән. Туҡтап тороп, уларға күҙ ташлаған. Зыян булмауын күргәс, ҡыҙҙы йыуатыр өсөн, үҙе кеүек күк сәскәне дуҫтары менән өҙөп алып, ҡыҙҙың ҡулына һалған.

Ләлә бик тыныс ҡына булһа ла:

- Әйҙә, дуҫлашайыҡ! – тип әйткән уға. – Беҙҙең менән күңелле, илама инде!

Әле генә түгелеп илаған ҡыҙ йылмайып ебәргән.

- Рәхмәт! Ҡурҡмағыҙ минән, мин башҡа күбәләктәрҙе тотмайым, тик алыҫтан ҡарап һоҡланам, - тип көлөп ебәргән ул.

Ҡыуанысынан Ләлә башҡа күбәләктәр менән матур бейеүҙәрен бейей башлаған, ә ҡыҙыҡай уларҙың тылсымлы бейеүенә хайран ҡалған.

Бына шулай уйламағанда Ләләнең тағы ла бер дуҫы килеп сыҡҡан. Ни тиклем дуҫтарың күберәк, шул тиклем йәшәүе лә күңелле ул.

Сәлихов Руслан,

Өфө калаһы ҡала округы

18-се башҡорт балалар баҡсаһы

муниципаль автоном мәктәпкәсә

белем биреү учреждениеһы

тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Ишдәүләтова Әлиә

Батыр бесәй

Минең Арыҫлан исемле бесәйем бар. Ул әле бәләкәй. Мин унының менән уйнарға бик яратам. Бер көндө бесәйем менән ҡыҙыҡ хәл булды. Иртәнсәк ашарға ултырғас, ҙур ғына себен минең эргәмдә осоп тик йөрөй. Әллә минең ашымды ашайым, ти. Әсәй

себенде ҡыуып ебәрһә лә, ул кире килә. Бесәй уға яман итеп ҡарап ҡуя, тик теймәй.

Машина менән уйнаһам, тағы ла себен эргәмдә оса. Ҡыуып баҫтырһам да, эргәмә кире килә. Арып бөттөм уның «бз-з-з» тиеүенән. Ә бесәй ул себенде күҙәтә лә күҙәтә.

Инде төшкө йоҡоға ятҡырҙы әсәй, ә теге себен һаман мине үсекләй, башым осонда ғына бызылдай. Бер ваҡыт Арыҫлан мыяулай башланы.

- Мя-я-у, себен, һин нишләп минең дуҫымды ыҙалатаһың? Көнө буйы ял бирмәйһең?

- Бз-з-з, миңә лә дуҫтар кәрәк! Мин бында бер үҙем, миңә күңелһеҙ! – тип себен илап ебәрҙе.

- Бәй, шул ғынамы ни ҡайғың, әйҙә, мин һине урамға алып сығам, беҙҙең өйҙә башҡа себендәр юҡ һәм булмаясаҡ та, - тип бесәй, бер һикереп, себенде тотто ла алды!

Ҡыйыу атлап, бесәй себенде ишек аҫтынан тышҡа осороп ебәрҙе.

- Рәхмәт, Арыҫланым, һин бәләкәй булһаң да, батыр, сос булып сыҡтың, - тип ҡыуанып әйттем бесәйемә.

- Мр-р-р, - бесәй минең яныма ятып йоҡлап та китте.

Дуҫтар менән бергә тыныс та, рәхәт тә шул. Эйе бит, дуҫтар?

Камалов Тимур,

Өфө калаһы кала округы
138-се балалар баҡсаһы
муниципаль автоном мәктәпкәсә
белем биреү учреждениеһы
тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Һеләүһенова Нурзидә

Дуҫлыҡ

Бер ҡояшлы көн ине. Трактор юл буйлап бара икән. Моңһоу, кәйефһеҙ килә. Шунда ул ҡаршы йөк машинаһын күреп ҡала һәм улар бергә юл буйлап барырға булалар. Бергә барыуы күңелле булып китә. «Күрешербеҙ, дуҫҡайым!» - тип хушлашалар. Дуҫ менән оҙон юл да ҡыҫҡа күренә шул.

Ҡарағолова Айлин,

Өфө ҡалаһы ҡала округы

308-се башҡорт балалар баҡсаһы

муниципаль автоном

мәктәпкәсә белем биреү

учреждениеһы

тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Рахманғолова Гөлсиә

Тейенбай

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, Тейенбай. Ул бик тә аҡыллы, уңған, тырыш булған. Бер көндө урманға бәшмәк йыйырға сығып киткән, ти. Йөрөй торғас, ҡаршыһына Төлкөбай осраған. Тейенбай:

- Һаумы, Төлкөбай, хәлдәрең нисек?- тип сәләм биргән. Төлкөнөң әллә кәйефе булмаған, әллә үҙе шулай әҙәпһеҙ булған, уға яуап бирмәгән. Тейен ҡабатлап өндәшкән:

- Нишләп минең менән һөйләшмәйһең?

Төлкөбай, йәне көйөп:

- Минең һаулыҡта һинең ни эшең бар?-тигән

- Һаулыҡ һорашҡанға яуап бирергә кәрәк. Был тәрбиәлелекте, аңлата, – тигән Тейенбай, - мине әсәйем шулай өйрәтә.

- Минең бит әсәйем юҡ. Улай матур һөйләшергә өйрәтергә, исмаһам, бер дуҫым да юҡ!- тип моңһоуланған, ти, Төлкөбай.

- Әйҙә, дуҫлашайыҡ! Яғымлы һөйләшергә өйрәнерһең, һине башҡалар ҙа яратыр.

Шул көндән башлап улар дуҫлашҡан, ти. Төлкөбай ипле һөйләшергә өйрәнгән. Уның дуҫтары ла күбәйгән, ти.

Торопҡолова Айгөл,

Өфө калаһы ҡала округы

308-се башҡорт балалар баҡсаһы

муниципаль автоном мәктәпкәсә

белем биреү учреждениеһы

тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Мөхәмәтйәнова Әлиә

Эт менән боландар

Бер ваҡыт эт урманға сығып киткән. Ул унда боландарҙың өйөрөн осраткан. Эт оҙаҡ һоҡланып ҡарап торған да түҙмәйенсә улар менән бергә йүгереп ҡарарға булған. Боландар шундай шәп йүгергәндәр, эт уларҙы ҡыуып етә алмаған. Эт уларҙың юлбашсыларына килгән дә былай тип һораған:

- Һеҙ шундай шәп йүгерәһегеҙ, бының сере нимәлә?

- Беҙҙең бит ҡойроҡтарыбыҙ ҡыҫҡа, шунлыҡтан шәп йүгерәбеҙ, - тип яуаплаған юлбашсы. Ошо һүҙҙәрҙе ишеткәндән һуң, эт үҙенең ҡойроғон ҡырҡтырып ташлатҡан. Әммә эт эт булып ҡалған, ҡыҫҡа ҡойроҡ менән дә шәп йүгерә башламаған.

Нурмөхәмәтов Динислам,

Өфө калаһы кала округы
166-сы башҡорт балалар баҡсаһы
муниципаль бюджет мәктәпкәсә
белем биреү учреждениеһы
тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Нурмөхәмәтова Роза

Ҡыҙыл түшле турғай

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер турғай. Ул бик ҡыҙыҡһыныусан булған, тирә-яҡҡа осоп, кешеләрҙе, хайуандарҙы күҙәтергә яраткан. Үҙе башҡа хайуандар менән бик тиҙ уртаҡ тел таба икән һәм шуға ла унын дуҫтары ла күп икән, ти.

Бер ваҡыт шулай осоп йөрөгән ваҡытта урман эсенә, төпкә осоп инеп киткән икән турғай. Унда төлкөнө күреп ҡалған да, эргәһенә барып танышырға булған.

- Мин турғай, ә һин кем булаһың, әйҙә, танышайыҡ, дуҫ булайыҡ. Былай урман эсендә минең бер генә лә дуҫым юҡ әле, - тигән турғай. Ә төлкө, хәйләкәр, үҙенә осоп килгән ҡошто күреп, ирендәрен ялап ҡуйған хатта.

- Әйҙә, һинең һымаҡ күктә осоп йөрөгән дуҫым миндә лә юҡ, - тигән була. – Төш эргәмә, өҫкә ҡарап һөйләшеүе ҡыйын, - тип

саҡырып та ҡуйған.

Турғай төлкөнөң хәйләкәр икәнен белмәгәс, төшөп ултырған. Төлкөнөң яланып ултырғанын күреп ҡалған да, ҡошсоҡ ҡурҡып осоп китеп барғанда төлкө уның түшен сапсып ҡала. Шул сапсылған урыны ҡыҙарып сыға. Ҡыҙарған түшле турғайҙың балалары һәм балаларының балалары - бөтәһе лә ҡыҙыл түшле турғай булып ҡалған, ти.

Сөнәғәтова Ләйсән,

Өфө калаһы кала округы
216-сы балалар баҡсаһы
муниципаль автоном
мәктәпкәсә белем биреү
учреждениеһы
тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Сөнәғәтова Илүзә

Ат һәм хужа

Борон-борон заманда хужаның урамында йорт хайуандары йәшәгән: һыйыр, һарыҡ, кәзә, үгеҙ һәм ат. Хужа уларҙы һәр ваҡыт матур итеп ҡараған. Йорт хайуандары ас тормаһын тип, көнө-төнө эшләгән. Йәйен ҡышҡылыҡҡа бесән әҙерләгән, ҡышын һыуын ташып эсергән, торған урындарын таҙартҡан. Хужаның мал ҡарауҙан да башҡа эше күп булған. Башҡа хайуандарҙың иҫтәре китмәһә лә, ат гел генә хужаһын күҙәтеп, ҡарап торған. Хужаһының иртәнән кискә тиклем эш менән булғаны өсөн уны ныҡ йәлләгән. Ат яйлап ҡына көн дә ярҙам итергә булған: өҫтөнә ултыртып урманға йөрөткән, ер һөргән, утын, бесән эштәрендә лә көнө-төнө эргәһендә булған. Хужаның эше күпкә еңеләйгән.

Шул ваҡыттан алып ат - хужаның тоғро дуҫы, ярҙамсыһы булған, ти.

Рәхмәтуллина Азалия,

Өфө калаһы кала округы «Мөхәмәт Иҫҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының 4-се класс уҡыусыһы

Етәксеһе: Солтанова Гөлфирә Мөхәмәт ҡыҙы

Матурлыҡ сере

Ҡояшҡа иркәләнеп, елгә наҙланып, бер аҡланда өс кескәй ағас күҙен асҡан, ти. Ай үҫәһен, көн үҫеп, бөрөләргә тулышҡандар. Көндән-көн ҡупшыланған һомғол буйлы ағастарҙың береһе йәшел энәләрен тырпайтҡан, икенсеһе муйыл япрағын ярған, өсөнсөһө ҡайын япрағына төрөнгән. Бөтә аҡлан өс ағастың матурлығына таң ҡалған, ти.

Бына иң тәүҙә бөтә ғаләмде хуш еҫкә күмеп, муйыл ағасы аҡ күлдәген кейгән.

- Һин шул тиклем матурһың! - тип Ҡайын менән Шыршы әхирәтенең матурлығына һоҡланған.

Аҡланға килгән балалар ҙа:

- Хуш еҫле Муйылкай,

Бигерәк ҡупшы, бөҙрәкәй, - тип йырлай-йырлай Муйыл

эргәһендә уйнағандар.

«Ишетәһегеҙме, минең турала йырҙар ҙа йырлайҙар. Минән дә матурыраҡ бер кем дә юҡ!» - тип маҡтана башлаған Муйыл. Ҡайын менән Шыршыға маҡтансыҡ әхирәтенең ҡылығы оҡшамаған. Көндән-көн маһая барған Муйылдан әхирәттәре бөтөнләй ситләшкән. Ә Муйылдың быға һис эсе бошмаған. Ана бит, бөтә аҡландағы халыҡ тик Муйыл янында урала.

Бер көн Муйыл йоҡоһонан уянһа, аҡ күлдәген ҡырау өткәнен күреп, әрнеп-әрнеп илай. Муйылдың ҡайғыһын күргән Ҡайын менән Шыршы уны йыуатырға ашығалар.

Ваҡыт үткән. Иртә йәйҙең бер көнөндә Ҡайын күҙҙең яуын алыр, матур бөҙрә алҡаларын таҡҡан. Тағы аҡлан халыҡ менән тулған. Балалар, еләк йыйып, алҡалы ҡайын төбөндә ултырып, ял иткәндәр. Үҙе тураһында әллә күпме маҡтау һүҙҙәре ишетһә лә, Ҡайын бер ҙә маһаймаған, Шыршы әхирәтенең күңелен уйлаған.

Көҙ еткән. Төрлө төҫкә инеп, уттай баҙрап янған Ҡайын янына рәссам килгән. Ҡайындың нәзәкәтлегенә илһамланып, рәссам буяуҙарын алған. Шул саҡ Ҡайын көтмәгәндә:

- Яланда иң матуры мин шул! Рәссам да тиккә мине һайламаны, - тип әйтеп ысҡындырған.

Шыршыға әхирәтенән был һүҙҙәрҙе ишетеү шул тиклем ҡыйын була. Әхирәттәренә күңеле ҡалып, шыршы үҙенә йомолған, ти. Ваҡыт үткәс, көҙҙөң әсе елдәренә түҙмәй, бар япраҡтар ергә ҡойолғас, аҡланда йәшел энәләрен тырпайтып бер Шыршы ғына ғорур баҫып ҡала.

Бына ҡыш еткән. Аҡ ҡарға мансылған аҡланға тағы балалар йыйыла. Йәшел шыршыны төрлө төҫтәге уйынсыҡтар менән биҙәп, уны уратып, әйлән-бәйлән уйнайҙар. Бөтә аҡлан Шыршының матурлығына хайран ҡала.

- Шыршыҡай! Һин бит иң матуры! Иң һомғоло һин икән! – тип таң ҡала Ҡайын менән Муйыл.

Шыршы уларға:

-Әхирәттәрем! Беҙҙең һәр беребеҙҙең үҙ матурлығы бар. Йылдың һәр миҙгелендә үҙ төҫөбөҙ менән тирә-яҡ ғаләмде йәмләйбеҙ. Беҙ был донъяға матурлыҡ бүләк итеү өсөн яратылғанбыҙ. Дуҫ-татыу йәшәйек! – тип өндәшә.

Ғәбитова Лилиә,

Өфө ҡалаһы ҡала округы

«52-се Лицей» муниципаль

бюджет дөйөм белем биреү

учреждениеһының

1-се класс уҡыусыһы

Етәксеһе: Әбсәләмова Шәүрә

Дуҫлыҡ ҡәҙере

Борон-борон заманда биш дуҫ йәшәгән – Бүре, Төлкө, Торна, Суртан һәм Ҡуян. Бик дуҫ йәшәгән улар. Бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөгән, бер-береһен күстәнәстәр менән һыйлаған.

Бер ваҡыт хәйләкәр төлкөгә былай дуҫлашып йәшәү күңелһеҙ була башлаған. Дуҫтарын һынап ҡарарға булған. Бүрегә барған да:

- Бүре дуҫҡайым, һин шундай көслөһөң, ғәҙелһең. Балыҡ һәм ҡоштар менән уйнап йөрөгәнсе, һиңә айыу менән дуҫлашыр кәрәк, - тигән.

Бүре уйға ҡалған. Ысынлап та, Төлкө хаҡ һүҙ һөйләй бит! Дуҫтар айыу кеүек көслө лә, ҡурҡыныс та булырға тейеш тип, Айыу менән дуҫлашып киткән был.Төлкө торнаға килгән:

-

- Торна дуҫҡайым, һин иркле ҡош, беҙҙең арала һин генә оса беләһең. Ҡуян менән Суртан һинән көнләшәләр, ҡанаттарыңды урлап алырға йөрөйҙәр, - тигән. Торна, оҙаҡ уйлап тормай, Төлкөнөң һүҙенә ышанып, икенсе урманға осоп киткән.

Төлкө инде Ҡуянға килгән:

- Ҡуян дуҫ, һин юҡҡа тегеләргә ышанып йөрөйһөң, һин бәләкәс кенә, йомшаҡ ҡына, туның да бик матур, Бүре дуҫҡайың күптән ҡыҙығып йөрөй, туныңды сисеп алырға хыяллана.

Ҡуян ҡурҡышынан дер ҡалтырап китә. Ул, Төлкөгә рәхмәттәр уҡып, ҡыуаҡ аҫтына йәшенә.

Төлкөнөң ҡыланыштарын ситтән генә күҙәтеп торған Суртан уны янына саҡырып ала ла:

таралып бөттө. Ҡабат осрашһаҡ та, юлдарыбыҙ артабан айырым булыр. Юғалған ышанысты ҡабат тергеҙеп булмаç. Былай булғас, үҙең дә яңғыҙ йөрө. Сер итеп кенә әйтәм: һинең кеүек матур, аҡыллы хайуан юҡ донъяла. Береһе лә һиңә тиң түгел. Ҡәҙереңде бөтөрөп, дуçлашып та йөрөмә. Үҙеңә баш, үҙеңә түш булып йәшә, - тигән аҡыллы Суртан.

Төлкө, Суртандың был һүҙҙәренән һуң, маһайып китеп, береһен дә һанға һуҡмай, үҙе генә йәшәй башлаған.

Ошо хәлдәрҙән һуң биш дуç бер-береһенән ҡурҡып, йә, киреһенсә, көс күрһәтеп, маһайып, айырым йәшәй башлағандар.

Бына шулай, бәләкәс дуçтарым, дуçыңдың ҡәҙерен белеп, уларға таянып йәшәргә кәрәк. Шул саҡта һеҙгә бер ниндәй ҙә ел-ямғыр ҡурҡыныс булмаясаҡ.

Камалова Диана,

Өфө калаһы кала округы

128-се мәктәп муниципаль

бюджет дөйөм белем биреү

учреждениеһының

1-се класс уҡыусыһы

Етәксеһе: Әхмәтшина Юлиә

Ринат ҡыҙы

Йомро икмәк

Өфө ҡалаһында йәшәгән, ти, бер ғаилә. Уларҙың Әминә исемле ҡыҙҙары булған, ти. Әминә йәйге ял ваҡытында өләсәһенә ҡунаҡҡа ҡайтҡан. Көндөҙ йәшелсәләргә һыу һипкәндәр, ваҡ-төйәк эш менән булғандар. Кистәрен өләсәһе менән әкиәт уҡығандар, ти. Әминәгә йомро икмәк тураһында әкиәт бигерәк оҡшаған, ти, һәм ул өләсәһенә йомро икмәк бешереүен һораған:

- Әйҙә, өләсәй, без ҙә йомро икмәк бешерәйек, әкиәттәге кеүек, - тигән ҡыҙ. Өләсәһе шуны ғына көткәндәй, һә тигәнсе бешереп тә ҡуйған. Күпереп, матур итеп бешкән икмәк, өҫтәл өҫтөндә күҙҙе ҡыҙҙырып ята икән. Әминә өләсәһенән:

- Йомро икмәк ҡасмаҫ элек ашап ҡалмайбыҙмы, өләсәй? -тип һораған.

Өләсәһе йомро икмәкте өй хужаһы менән бергә ултырып

ашарға кәрәклеген аңлатҡан, шунда ғына ул ҡасмай тигән, ти. Ә өй хужаһы – олатай - тышта эш менән булышып тик йөрөй, ти, һис тә инергә уйламаған. Әминәнең түҙемлеге ҡалмағас, өләсәһенә:

- Әйҙә, беҙ олатайға сығып ярҙам итешәйек тә, бергәләп эште бөтәйек һәм йомро икмәкте инеп ашарбыҙ, - ти.

Әлбиттә, өләсәһе риза була һәм улар олатаһына ярҙам итер өсөн тышҡа сығалар. Тиҙ арала барлыҡ эштәрҙе тамамлап, бергәләп өҫтәл артында йомро икмәк менән тәмләп тороп сәй эскәндәр, ти. Йомро икмәктең еҫе бөтә ергә таралған, ти.

Шунан бирле Әминә өләсәһенә ҡайтҡан һайын, уларға ярҙам

итеп, тәмле итеп йомро икмәк бешереп ашатыр булған, ти.

Нурмөхәмәтов Инсаф,

Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фатима Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы

Иң көслө батыр

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер батыр. Уның исеме Кинйә булған. Ул төрлө януарҙарға һунар итеп көн күргән.

Бер ваҡыт күрше батшалыҡта иң көслө батырҙы билдәләү өсөн ярыш иғлан иткәндәр. Кинйә батыр ҙа барып көсөн һынап ҡарамаҡ булған. Бына ул ярыш була торған ҡалаға барып еткән. Майҙанда халыҡ күптән йыйылған, ти. Батша сығып, ярыштың шарттарын иғлан иткән. Беренсе шарт – батшаның ҙур үгеҙе менән алышыу. Икенсе шарт – үгеҙҙе еңгән батырҙар бер-береһе менән көрәшә. Ә инде кем дә кем икенсе шартты үтәп барыһын да еңә, шул өсөнсө ярышта батшаның ҡыҙы менән көрәшә. Өс шартты ла үтәгән батырға батша ярты байлығын һәм ҡыҙын кейәүгә бирә.

кенә үгеҙ майҙандың уртаһына килеп төшә. Икенсе ярышта ла Кинйә бер ҙә һынатмай еңеп сыға. Өсөнсө ярышта батыр егет батшаның ҡыҙын, һауаға сөйөп ебәреп, кире ҡулына тотоп ала. Шулай итеп, Кинйә, батшаның ярты байлығын һәм ҡыҙын алып, матур итеп йәшәп китә.

Ныязғолова Кәмилә,

Өфө калаһы кала округы «111-се гимназия» муниципаль автоном дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы

Етәксеһе: Мөхәмәтшина Зөлфиә Рәмил ҡыҙы

Гөрләүек менән Гөрләүеккәй

Борон-борон заманда тау башындағы Ҡарбикәнең игеҙәк ҡыҙҙары Гөрләүек менән Гөрләүеккәй ауылдағы кешеләрҙе күҙәтергә тип, әсәләре киҫәтеүенә ҡарамай, ашыға-ашыға ауылға төшөп киткәндәр. Тау башындағы ағастарға, ҡоштарға уларҙың ҡылыҡтарын һөйләмәҫкә үтенеп, ауылға ашыҡҡандар.

Аҫта уларҙы балалар кинәнеп ҡаршы алғандар. Ләкин, үкенескә ҡаршы, ауылға төшкән арала игеҙәктәрҙең биттәре бысранып бөткән. Беҙҙән кешеләр көлөр, тип Гөрләүеккәй туғанына йылғаға барып биттәрен йыуырға тәкдим иткән. Гөрләүек ҡуш ҡуллап риза булған.

Ә йылға уларҙы былай тип йырлап ҡаршы алған:

«Эй, шаян игеҙәктәр,
Һеҙ бигерәк илгәҙәктәр
Мине лә бысраттығыҙ,
Ник мине осраттығыҙ?

Әйҙә киттек диңгеҙгә,

Күрһәтәм диңгеҙ һеҙгә,

Битте шунда йыуырбыҙ,

Унда тик ел ҡыуырбыҙ».

Гөрләүек менән Гөрләүеккәйҙең был тәкдимдән баштары күккә тейгән. Беренсенән, биттәрен йыуасаҡтар, икенсенән, донъя гиҙәсәктәр. Кемгә эләгә бындай тормош?

Уларға тоҙло диңгеҙ һыуы бик оҡшап ҡалған. Йыл һайын Ҡышбикәнең игеҙәктәре, апрель еткәс, диңгеҙгә тоҙло һыуҙа йыуынырға ашыға икән. Бына шулай был хәл йыл да ҡабатланып тора, ти.

Хәлитова Руфина,

Өфө калаһы кала округы «Зәйнәб Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһы» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы

Ай менән Ҡояш

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер әсәй. Ул әсәйҙе Ер - әсә, тип әйтер булғандар. Ер - әсә бик егәрле, уңған, йомшаҡ күңелле булған. Ниндәй генә эшкә тотонһа ла, бар эш тә уның ҡулынан килгән. Йәйен емеш-еләк, көҙөн йәшелсә, иген йыйған, ҡышын мал-тыуар, ҡош-ҡорт көтөп йәшәгән. Ә яҙын инде, бар донъяны таҙартып, йыйыштырып ҡуйған, ти.

Ер-әсә яңғыҙы түгел, уның ике сибәр ҡыҙы булған. Оло ҡыҙының исеме Ҡояш, кесе ҡыҙының исеме Ай. Ҡояш йылы күңелле, күҙҙең яуын алырлыҡ матур, тик холҡо ғына бик ҡыҙыу булған. Айҙың да матурлығы иҫ китәрлек, тик ниңәлер, Ай гел моңһоу, һалҡын күңелле, булған, ти.

Был ике ҡыҙ ниңәлер бер-береһе менән көнләшеп, ирешеп, әрләшеп йәшәгәндәр. Ер-әсә күпме генә уларҙы татыу булырға өйрәтергә тырышһа ла, килеп сыҡмаған. Улар үҙҙәренең

матурлығына һоҡланышып, әсәләренә лә ярҙам итергә яратмағандар, ти. Шулай итеп, көн үткән, ай үткән, йылдар үткән, ә Ер-әсә балаларының ярҙамын күрмәй, уларҙың ыҙғышыуҙарынан арып йәшәгән.

Бер көндө, Ер-әсә балаларының эт менән бесәй кеүек йәшәүҙәренән арып, ни эшләргә белмәй үкһеп илай башлаған. Бының ярһып илауын Күк йөҙө - батшабикә ишетеп ҡалған. Ул Ер - әсәне йәлләп, ике тәртипһеҙ ҡыҙҙы ла үҙенә алып, икеһен ике бүлмәгә бикләп, мәңгелеккә айырған. Ҡыҙҙар нисек кенә ялбарып һорамаһындар, уларҙы Күк йөҙө әсәләренә ҡайтармаған. Ә әсәләре инде ҡыҙҙарының юҡлығына ҡайғырған, Ай менән Ҡояшты тик ситтән генә күҙәтергә мәжбүр булған.

Шул көндән алып, Ай менән Ҡояш батшабикәнең һарайында йәшәргә ҡалған. Тик бер-береһе менән бер ҡасан да күрешмәгәндәр, ти. Улар үҙҙәренең насар ҡыланыуҙарын аңлағандар, тик һуң булған.

Шамматов Фаяз,

Өфө калаһы кала округы 131-се мәктәп муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы

Ҡуяндың ҡолағы ни өсөн оҙон булған?

Борон-борон заманда, хайуандар, йәнлектәр кеше телендә аралашҡан саҡта, ҡуяндарҙың ҡолаҡтары ҡойроҡтары кеүек ҡыҫҡа ғына булғанда, йәшәгән, ти, бер бик ғәйбәтсе ҡуян. Был ҡуян ғәйбәт һөйләргә яраткан икән. Уның ғәйбәт таратып йөрөгәнен белгән бер тылсымсы бер саҡ ҡуянға шелтәләп:



- Һин ниңә улай ғәйбәт таратып тик йөрөйһөң? Әгәр ҙә һаман да шулай ғәйбәт һөйләп йөрөр булһаң, һәр һөйләгән ғәйбәтеңдән ҡолағың оҙонлоҡҡа үҫер, - тигән.

Ҡуян һаман да хәбәр йыйып, ғәйбәт һөйләүен дауам иткән, ә ҡолағы үҫкәндән үҫә барған ти.

Бер заман был ҡуяндың ҡолағы ергә тиклем еткән. Барлыҡ урманда йәшәүсе йәнлектәр ҡуянға ҡарап аптырағандар, хатта ҡурҡҡандар. Ҡуянға ла был хәл оҡшамаған, ул бик ҡайғырған, ҡурҡҡан ти.

Тылсымсы:

- Ярай. Мин һиңә ышанам. Ғәйбәт һөйләүеңдән туҡтаһаң, ҡолағың да үҫеүенән туҡтар, - тигән.

Ҡуян иһә илап:

- Бындай бигерәк оҙон ҡолаҡ менән йөрөүе бигерәк ауыр бит.

Ҡолағымды кире элекке хәленә ҡайтар инде, - тигән ти.

Тылсымсы иһә:

- Кире элекке хәленә ҡайтара алмам, әммә бер аҙ ҡыҫҡартырмын. Оҙон ҡолағың һиңә башҡаса ғәйбәт хәбәр һөйләп йөрөмәҫкә һабаҡ булыр, - тигән икән.

Шулай итеп, ошо ваҡыттан башлап, ҡуяндарҙың ҡолаҡтары

Айнур һәм Динә Касимовтар,

Өфө ҡалаһы ҡала округы «Максим Горький исемендәге 3-сө гимназия» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусылары

Аҡтүш

Йәшәгән, ти, бәләкәй көсөк. Уның ҡушаматы Аҡтүш булған. Үҙе бәләкәй көсөк булыуына ҡарамаҫтан, ул Хужаһы – урмансының өйөн һаҡлаған.

Бер көндө урмансы браконьерҙар юҡлығын тикшерер өсөн урманға киткән. Шул ваҡыт уға бүре балаһы ҡунаҡҡа килә.

- Сәләм! Һин кем?

- Сәләм, мин Аҡтүш. Ә һин үҙең кем?

- Мин Ҡаратәпәй булам. Әйҙә, миңә ҡунаҡҡа, мин һиңә үҙемдең өңөмдө күрһәтәм, - тигән бүре балаһы.

- Әйҙә, - тип ризалашҡан Аҡтүш.

Аҡтүш бәләкәй булғанға Хужаһы уны бәйҙә тотмаған.

Улар урманға ҡарай йүгергәндәр. Шул саҡ урманда

ҡысҡырышҡан тауыш ишетеп ҡалалар.

- Тотоғоҙ!

Шул саҡ уларҙың алдына төлкө балаһы сабып килеп сыға:

- Ҡотҡарығыҙ! Минең арттан һунарсылар ҡыуа! Йәшерегеҙ, зинһар, мине!

- Әйҙә беҙҙең менән! - ти төлкө балаһына Ҡаратәпәй, һәм улар ҡыуаҡ араһына инеп йәшенәләр.

Шул арала ике һыбайлы күренә. Был – браконьерҙар булып сыға.

- Их, ҡасты бит! - ти, асыуланып браконьер.

- Ярар, тағы тоторбоҙ әле, - тип икенсеһе иптәшен йыуата.

Улар аттарын бороп кире яҡҡа сабып китәләр. Һыбайлылар күҙҙән юғалғас, Аҡтүш, Ҡаратәпәй һәм төлкө балаһы йәшенгән урындарынан сығалар.

- Һин кем булаһың? – тип һорайҙар дуҫтар төлкө балаһынан.

- Мин Ерәнҡойроҡ булам. Ә һеҙ кем?

- Мин – Аҡтүш, был – Ҡаратәпәй була. Беҙ Ҡаратәпәйгә ҡунаҡҡа китеп барабыҙ. Әйҙә, беҙҙең менән!

- Әйҙә, - ти төлкө балаһы Ерәнҡойроҡ.

Улар өсәүләшеп юлға сығалар. Оҙаҡламай Ҡаратәпәйҙең өңөнә лә килеп етәләр. Бүреләрҙең өңө ҡарт имән тамырҙары төбөндә урынлашҡан була. Ситтән хатта күренмәй ҙә. Дуҫтарҙы Ҡаратәпәйҙең әсәһе ҡаршы ала. Ул бүре балаһының көсөк менән төлкө балаһын ҡунаҡҡа алып ҡайтыуына аптырап та ҡала.

- Улым, һин ҡунаҡтар алып ҡайттыңмы?

- Эйе, әсәй, был Аҡтүш һәм Ерәнҡойроҡ.

- Ярар, һеҙ уйнап тороғоҙ, мин һунарға барып киләйем, - тип

Йәнлектәр өңдө ҡарап сыҡҡас, уйнарға керешәләр. Башта баҫтырыш, унан йәшенмәк уйнайҙар. Аҡтүш йәшенгәс, уны Ерәнҡойроҡ менән Ҡаратәпәй эҙләйҙәр. Шатланышып, күңелле уйнаған арала, улар һунарсы-браконьерҙарҙың да килеп сығыуын һиҙмәй ҡалалар. Ә теге ике браконьер Ерәнҡойроҡ менән Ҡаратәпәйҙең өҫтөнә һунар селтәрен ташлайҙар һәм бәйләп тә ҡуялар. Аҡтүш йәшенгән еренән сыҡҡанда, браконьерҙар аттарына атланып, сабып сығып та китәләр.

Аҡтүш уларҙың артынан йүгерә, ләкин ҡыуып тота алмай. Ул дуҫтарын ташламай, арттарынан еҫ буйынса эҙләп килә.

Тиҙҙән һунарсы-браконьерҙар ялға туҡтайҙар. Йәнлектәрҙе ағасҡа бәйләп ҡуялар. Костер янында ултырып, үҙҙәренең батырлыҡтары һәм табыштары менән маҡтаналар.

Ҡаратәпәй менән Ерәнҡойроҡтоң шым ғына шыңшыған тауыштары ишетелә.

Аҡтүш тауышһыҙ ғына, дуҫтары янына килеп, бәйләнгәнептәрен тешләп өҙә. Башта ул Ҡаратәпәйҙе ҡотҡара, һуңынан улар икәүләп Ерәнҡойроҡтоң ебен өҙөп ысҡындыралар. Шым ғына

Биксурина Эльвира,

Өфө калаһы кала округы «Максим Горький исемендәге 3-сө гимназия» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы

Өс егет һәм Аждаһа

Йәшәгән, ти, бер туған егеттәр: Сәлим, Кәрим һәм Ғәлим. Сәлим менән Кәрим гел бергә һунарға, балыҡҡа йөрөгәндәр. Ә Ғәлим улар менән бер ҡайҙа ла бармаған, өйҙә мейес башында китап уҡып тик ятҡан. Шулай бер ваҡыт Сәлим менән Кәрим тағы ла һунарға сығып киткән саҡтарында быларға өс башлы Аждаһа осраған икән. Кәрим Аждаһанан ҡасып өлгөргән, ә Сәлим өлгөрмәй ҡалған.

Кәрим ах та ух килеп, өйгә йүгереп ҡайтып кергән дә:

- Ғәлим, Ғәлим, беҙ урманда һунар иткәндә, беҙгә өс башлы Аждаһа һөжүм итте! Мин ҡасып өлгөрҙөм, ә Сәлим урманда тороп ҡалды! Әйҙә, тор, туғаныбыҙҙы аждаһаға ашарға бирмәҫбеҙ бит инде! – тип ҡысҡырып, һаман да китап уҡып ятҡан Ғәлимде йүгертеп алып сыҡҡан. Урманға килеп етһәләр, өс башлы Аждаһа Сәлимде ҡаршыһына ултыртып һорау ала икән. Ә Сәлим бер генә

нимә лә белмәй, ти. Хатта телефонынан да эҙләп ҡарай, ти, ә урман эсендә интернет тотмай икән. Аждаһа Кәрим менән Ғәлимде күреп ҡалған да:

- Эй, егеттәр, әгәр ҙә һеҙ ҙә был өс һорауға яуап бирә алмаһағыҙ, өсөгөҙҙө лә ашайбыҙ. Ә кем яуап бирә, бына ошо яңы айфонымды бүләк итәм, – тип өр-яңы айфон-12-не күрһәтә ти.

Аждаһаның өс башы берәр һорау бирә икән, һорауҙары ул тиклем ҡатмарлы ла булмаған. Ғәлим өс һорауға ла тиҙ генә яуап биргән. Аждаһа уны нык маҡтаған һәм вәғәҙә иткән бүләген тапшырған да йыраҡҡа-йыраҡҡа осоп киткән.

Бына шулай итеп, Ғәлимдең күп уҡырға яратыуы өс бер туғанды бәләнән ҡотҡарған, ти, хатта бүләкле лә иткән. Ғәлим яңы телефоны менән уйнап ултырмаған, ә тағы ла күберәк яңылыҡтар уҡып белгән, ти.



Хәсәнова Камилла,

Өфө калаһы кала округы 128-се мәктәп муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы

Етәксеһе: Әхмәтшина Юлиә Ринат ҡыҙы

Өс малай

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер бай һәм уның ҡатыны. Уларҙың бер-бер артлы донъяға өс улдары тыуған. Малайҙар бер-береһе менән көрәшеп, уйнап көн иткән. Тик шаярғанда ла, уйнағанда ла малайҙарҙың берәүһе үҙенең көсһөҙлөгө менән айырылып торор булған. Ҡайҙа булһа ла гел былар көсһөҙҙән көлгән булғандар, уны ҡыйырһытҡандар, ти.

Бер көндө ата-әсәһе ҡунаҡҡа киткәс, был өс малай еләк эҙләп урманға сығып киткәндәр. Бара торғас, бер матур, ялтырап торған өйҙө күреп ҡалғандар. Өйгә инеп ҡараһалар, унда алтын-көмөштән яһалған бик күп әйбер ята, ти. Беренсе малай алтындан ҡылыс, икенсеһе - тимер суҡмар, ә өсөнсөһө - көсһөҙө - тылсымлы таяҡ алған. Еләк эҙләү ҡайғыһы киткән, ти, алған әйберҙәренә ҡыуанып ҡайтырға сығалар былар. Юлда уларға өс башлы дейеү осрай. Көслө малайҙар алтын ҡылыс, тимер суҡмар менән

һелтәнеп-һелтәнеп ҡарайҙар, ләкин дейеүҙе еңә алмайҙар. Дейеү һаман утын сәсә, ти быларға. Шул саҡ көсһөҙ малай бер яҡта ҡурҡып ҡына ҡарап торған-торған да, тылсымлы таяғы менән бер һелтәгән икән, теге өс башлы дейеү юҡ булған, ти. Көслө малайҙар быны күреп бик ныҡ аптырағандар. Дейеүҙән ҡотҡарған ҡустыларына рәхмәт әйткәндәр һәм башҡа бер ваҡытта ла ҡыйырһытмайбыҙ, көлмәйбеҙ, тип һүҙ биргәндәр, ти.

Шул көндән башлап, көслө малайҙар көсһөҙҙәрҙән көлмәгәндәр, уларҙы ҡыйырһытмағандар, ә гел генә ярҙам итер булғандар.



Нафиҡова Айназа,

Өфө ҡалаһы ҡала округы «35-се белем биреү үҙәге» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы

Етәксеһе: Толомбаева Эльза Юрис ҡыҙы

Ҡунҡаҫтың нисек аҡылға ултырғаны

Борон-борон заманда, Дим йылғаһы кисеп сыҡмаҫлыҡ тәрән, йөҙөп сыҡмаҫлыҡ киң, мул һыулы булғанда, йәшәгән, ти, дүрт туған: Илсеғол, Балғажы, Алдар һәм Ҡунҡаҫ. Бик татыу, дуҫ йәшәгәндәр. Ағай-ҡусты була белеп, бер-береһен хөрмәт итеп, тыңлап ғүмер иткәндәр.

Үҫеп еткәс, өс оло ағай бер-бер артлы үҙ ғаиләләрен ҡороп, башҡа сыҡҡандар. Егеттәр Дим йылғаһынан йыраҡ китмәйенсә, бер-береһенән бик алыҫ булмаған арауыҡта Дим буйына ултырғандар. Күп итеп мал тотҡандар, йылҡы малын үрсеткәндәр, Дим буйы ҡыуаҡлыҡтарын тултырып, кәзә-һарыҡ ишәйткәндәр. Егеттәр эшкә тырыш булғандар, үҙҙәре кеүек егәрле, намыҫлы кәләштәре менән тырышып донъя көтә башлағандар, балалар үҫтергәндәр. Яйлап ҡына улар ултырған ерҙәр ҙурайған, халыҡ һаны артҡан, балалар ишәйгән. Шулай итеп, Дим буйында гөрләп торған өс ҙур ауыл барлыҡҡа килгән.

Илсеғол, Балғажы һәм Алдарҙың даны тирә-яҡҡа таралған, уларҙы бөтәһе лә бик ныҡ хөрмәт иткән. Тик быуна иң кесе туғандары Ҡунҡаҫ ҡына үҙенең уңыштары менән маҡтана алмаған. Ул һаман шулай бер үҙе йәшәп ятҡан. Бер заман, өс ағай бергә осрашҡан мәлдә, улар янына бер ҡарт килеп туҡтаған. Сәләм бирешкәндәр, хәл-әхүәл белешкәндәр. Был ҡарт бик йыраҡтан килеүен, Илсеғол, Алдар, Балғажы тигән кешеләрҙе эҙләүен әйткән.

- Беҙ булабыҙ ул кешеләр, - тип үҙҙәре менән таныштырғандар улар. Шунан ҡарт был яҡта бер кеше ашаусы барлығын һәм уның уларҙың ҡустылары Ҡунҡаҫ булыуын, шуның өсөн ул һаман бер үҙе йәшәп ятыуын һөйләп биргән.

- Был хәлде туҡтатмаһағыҙ, туғанығыҙ ҙа, һеҙ ҙә барлыҡ ауылдарығыҙ менән юҡҡа сығасаҡһығыҙ, – тигән.

Өс ағай ҙур хафаға төшкән, бик оҙаҡ һөйләшкәндәр, кәңәшләшкәндәр ҙә, туғандарын эҙләп киткәндәр. Ҡунҡаҫ торған ер йырып сыҡмаҫлыҡ ҡара урманға әйләнгән булған. Егеттәр ҡустыларын барып тапҡандар, уны һаҡал-мыйыҡ баҫып, ул ҡурҡыныс бер януарға оҡшап ҡалған булған. Иң тәүҙә улар уны тупраҡ ашатып, башҡа бер кешегә лә ҡул һуҙмаҫҡа ант иттергәндәр, аҙаҡ мунса яғып, уны ҡырындырып, йыуындырып, кеше рәүешенә килтергәндәр. Ҡунҡаҫ ағаларына антын боҙмаҫҡа вәғәҙә биреп тороп ҡалған. Вәғәҙәһен боҙмаған Ҡунҡаҫ. Иң тәү сиратта ул өй-ҡаралтыһын ипкә килтергән, тирә-йүнен бысраҡтан, сүп-сарҙан таҙартҡан. Бер аҙ ваҡыттан кәләш әйттергән, улар бик матур итеп йәшәп киткәндәр, мал үрсеткәндәр, Ҡунҡаҫ быйма

баçыу эшенә керешеп, тирә-йүнгә бына тигән оçта даны таралғанхәлен белешеп торғандар, кәрәк ерҙә ҡул ярҙамы, кәрәк ерҙә һүҙ ярҙамы күрһәткәндәр. Улар Ҡунҡаçтың аҡылға ултырыуына бик ныҡ шатланғандар, ҡустылары менән ғорурланғандар. Ҡунҡаç йәшәгән ер ҙә ҙурайған, Димдең Ҡунаҙы тауын уратып ҡына аҡҡан бөгәлендә матур, ҙур ауыл үçеп сыҡҡан.

Шулай тормош үҙ яйы менән дауам иткән. Дүрт туған ҡартайған, барлыҡ эштәрен, мал-тыуарҙарын улдарына, ейәндәренә тапшырып, бер-бер артлы донъя ҡуйғандар. Уларҙың балалары йәшәгән ерҙәренә Илсеғол, Балғажы, Алдар, Ҡунҡаç тигән исемдәр биреп, аталарының дандарын мәңгеләштергәндәр.

Был дүрт ауыл әлеге көндә лә бик матур, данлыҡлы ауылдар иçәбендә. Унда йәшәгән кешеләр бер-береһенә ярҙамсыл, дуç, татыу булыуҙары менән айырылып тора. Минең дә ул ауылдарҙа булғаным бар, бик яҡшы ҡунаҡ итәләр, күпме ашаһаң да һыйҙары бөтмәй, моңло йырҙарын тыңлаған һайын тыңлағы, дәртле бейеүҙәрен бейегән һайын бейеге килеп тора. Һеҙ ҙә барып күрегеҙ, Дим һыуында ҡойоноп, һаулығығыҙҙы нығытып, үпкәгеҙ йөҙгәнсе ҡымыҙ эсеп ҡайтығыҙ!

Ишемйәрова Айгизә,

Өфө калаһы кала округы «Мөхәмәт Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының 3-сө класс укыусыһы

Етәксеһе: Сәбитова Фәниә Рафиҡ кыҙы

Ике сысҡан

Борон-борон заманда
Ҡуйы ҡара урманда,
Бәләкәй оя ҡороп,
Йәшәгән ике сысҡан.

Береһе-сос, ҡыйыу сысҡан
Береһе йоҡосо, ялҡау булған.
Көнө-төнө ялҡауланып,
Түбәгә төкөрөп ятҡан.

Көндәр үткән..
Ике сысҡан, етәкләшеп,
Һунарға сығып киткән.
Бик күп ерҙәрҙе үтеп,
Ҙур соҡорға төшөп киткән.

Соҡорҙан сығам тип,
Тырышҡан егәрле сысҡан:
Һикергән дә һикергән,
Бар балсыҡты төшөргән.

Ә ялҡауы шунда уҡ
Бирешкән насар уйға:
Был соҡорҙан сығыу юҡ, тип
Күмелгән төшкән ергә.

Ҡойолоп төшкән балсыҡ
Тау булып күтәрелгән.
Егәрле сысҡан тырышып
Үрмәләп менеп еткән.

Ялҡау сысҡан бирешеп
Күмелеп ятып ҡалған.
Уның өсөн яҡты көндәр
Бына шулай тамам булған.

Бына шулай, дуҫтарым,
Тырыш, ҡыйыу булайыҡ!
Ауырлыҡтарға бирешмәйсә
Тик үргә ынтылайыҡ!